Мультимедиялы проект

# “Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай...”

*Шағир Р.Ғариповтың ижадында ҡоштар образының сағылышы*

**Башҡарҙы**: Моратшина Ләлә Фәтих ҡыҙы,
Туған тел һәм әҙәбиәт бүлегенең
IV курс студенты
**Етәксеһе**: Кәримова Гөлнара Яхъя ҡыҙы,
башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы

Туймазы 2011

Йөкмәткеһе

**Инеш** 3

1. *“Түгелдер был, ахыры, һабантурғай,*
*Был йөрәгем, ахыры, шулай йырлай”.*

Р. Ғариповтың тәбиғәт күрке-ҡоштар хаҡындағы шиғырҙары. 6

2. *“Кемгә сәптер усындағы сәпсек,*
*Мин артынан ҡыуҙым торнаның.”*

Кешеләр характерын, тормошто тасуирлағанда ҡоштар образының роле 11

3. *“Был донъяла аҡҡош йыры барҙа...”*

Шағирҙың мөхәббәт хаҡындағы шиғырҙарында ҡоштарҙың сағылышы 17

**Йомғаҡлау** 20

**Файҙаланылған әҙәбиәт** 22

**Ҡушымта**

## Инеш

Рәми Ғарипов — башkорт әҙәбиәте һәм йәмғиәте тарихында kабатланмаҫ шәхес булып балkыны. Ул аkыл эйәһе, һүҙ оҫтаһы, телде һаkлаусы һәм байытыусы шағир.

Билдәле шағир Р. Бикбаевтың ошондай һүҙҙәре бар: “Тәбиғәт менән бер туған булып, унан көс алып йәшәү — Р.Ғарипов лирикаһын бынған тыш бөтөнләй күҙ алдына килтереп булмай. Был шәхестең барлыk яҙмышы ер-һыу яҙмышы менән айырылғыһыҙ”[1,483]. Ысынлап та, Рәми Ғариповтың тәбиғәт тураһында kайһы ғына шиғырын алып kараһаң да унның нигеҙендә ниндәйҙер фекер ята. Ул бәләкәй генә шиғырҙарын да бушkа ғына, күңеле тулып, йә иһә шатлығынан ижад итмәгән, ә һәр дүрт юллыkта ла күпме мәғәнә асkан. Зиннур Ураkсин да быға иғтибар итә һәм ул: “Р. Ғариповтың шиғри образдарының нигеҙендә тәү kарашkа бик таныш тойолған тәбиғәт күренештәре ята: kоштар, тауҙар, үлән, йәнлектәр һәм башkа ғәҙәти нәмәләр аша ул үҙенең уй-тойғоларын аса, ҙур дөйөмләштереүҙәргә ирешә. Бының менән шағир һис тә социаль мәсьәләләрҙән ситкә тайпылмай, кешелек донъяһынан ситләшеп, саф тәбиғәткә һыйынырға тырышмай. Киреһенсә, тормоштоң социаль асылын ана шулар аша уkыусының аңына еткерә” – тип яҙа [18,329].

Р. Ғарипов шиғырҙары Тыуған илгә, тәбиғәткә, мөхәббәткә, дуҫлыkkа, һөйөүгә туған телгә арналған. Шул шиғырҙар араһынан беҙҙе kоштар хаkындағылары үҙенә йәлеп итте.

Беҙҙең халkыбыҙҙа kоштарға айырыуса kараш йәшәй. Улар - азатлыkkа әйҙәүсе ғорурлыk символы, тәбиғәт йырсылары булып күҙ алдына баҫалар. Әкиәт, легендаларҙа, йырҙарҙа беҙ быны күрәбеҙ. Айырыуса йырҙарҙа. Башkорт халыk йырҙарында аkkош, kарлуғас, һандуғас образдары йышыраk осрай.

Шиғриәттә лә kоштар тураһында яҙылған әҫәрҙәр бар. Һәр шағир уларға бәйләп ниндәйҙер фекер еткерә. С. Юлаев, М. Аkмулла, М. Кәрим, Р. Бикбаев, А. Игебаев әҫәрҙәрендә беҙ бөркөт, kарсыға, шонkар, һандуғас кеүек образдарға тап булабыҙ. Был шиғри әҫәрҙәрҙә авторҙар тәбиғәткә һоkланалар, йәшлеген иҫкә төшөрәләр, үткән замандарға әйләнеп kайталар, kоштарҙа һәм кешеләрҙәге сифаттарҙың оkшашлығын күрәләр, мөхәббәт, тормош хаkында уйланалар.

Ә Р. Ғарипов ҡоштарға бәйле шиғырҙарында ниндәй яңы һүҙ әйтте икән? Был беҙгә теманы һайлау өсөн беренсе сәбәп булды. Икенсенән, Р. Ғарипов ижады мәктәптә өйрәнелә. Тимәк, беҙгә, буласаҡ уҡытыусыларға, уның шәхесен, тормошон, әҫәрҙәре үҙенсәлектәрен тәпләрәк өйрәнеү мотлаҡ. Өсөнсөһө – шағир шиғриәте серле ҡоштар донъяһы кеүек үҙенә әйҙәне. Әлбиттә, был темаға ҡараған әҫәрҙәре менән беҙ алдан уҡ таныш инек, ошо "танышлыҡ" үҙенә нығыраҡ тартты, ентекле тикшерергә юл асты.

Алда әйтелгәндәрҙән сығып, беҙ Р. Ғариповтың ҡоштар хаҡындағы шиғырҙарын өйрәнеү бурысын ҡуйҙыҡ һәм түбәндәге маҡсаттарҙы билдәләнек:

1. Р. Ғарипов шиғырҙарын тикшереү, идея-тематик йөкмәткеһен, художестволы үҙенсәлектәрен анализлау.
2. Ҡоштар хаҡындағы шиғырҙарҙы аңларға булышлыҡ итерҙәй өҫтәлмә сығанаҡтарҙы – шағирҙың көндәлектәрен, замандаштары иҫтәлектәрен, әҙип биографияһына бәйле һ.б. хеҙмәттәрҙе йыйыу, өйрәнеү.
3. Ҡоштар хаҡында шиғырҙарҙың Р.Ғарипов ижадында һәм башҡорт әҙәбиәтендә тотҡан урынын билдәләү.
4. Йәштәрҙә тыуған яҡҡа, тәбиғәткә, Тыуған илгә һөйөү уятыуҙа, уларҙа матур сифаттар тәрбиәләүҙә был шиғырҙарҙың мөмкинлектәрен күрһәтеү.
5. Р. Ғарипов ижадын өйрәнеү дәрестәрендә һәм дәрестән тыш сараларҙа ҡулланыр өсөн презентациялар әҙерләү. Беҙ Р.Ғарипов шиғырҙарын тикшереү һөҙөмтәләренә нигеҙләнеп, "Р.Ғариповтың ҡоштар хаҡындағы шиғырҙары", "Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай" исемле мультимедиялы презентациялар әҙерләнек. Беренсе презентация материалдары ҡушымтала бирелә. Ошо һәм икенсе презентацияны электрон вариантта тәҡдим итәбеҙ.

Шағир ижадында ҡоштар хаҡында шиғырҙар байтаҡ ҡына: "Йүрүҙән ҡаҙҙары", "Күгәрсендәр", "Торналар", Сая сәпсек", "Аҡсарлаҡтар", "Ҡантүш турғайҙар", "Оҙаҡ тыңлап торҙом сыйырсыҡты", "Һабантурғай" һ.б. Шиғырҙары менән таныш булмаған кеше был әҫәрҙәрҙә ҡоштар, уларҙың һайрауы, шағирҙың уларҙан илһам алыуы урын ала тип уйларға мөмкин. Шиғырҙарын уҡый башлаһаң, ысынлап та, был фекер раҫҡа тап килә һымаҡ. Был тик тәү ҡарашҡа ғына. Шағир был әҫәрҙәрендә тәбиғәттең гүзәл йырсылары менән бергә тормош, йәшәйеш, кешеләр хаҡында ла һүҙ йөрөтә.


рами2 - Microsoft PowerPoint
Нескә күңелле шағир ҡоштарҙың гүзәл йырлауына таң ҡала. Тәбиғәтте яратҡан кешегә хас күҙәтеүсәнлек, тойғолар сафлығы һәм шағирлыҡ таланты. Бына ошолар хас Р.Ғариповтың шиғырҙарына. Улар уҡыусыны тойғоландыра, был мәлде күҙ алдына баҫтырыу, йөрәкте елкенләндереү көҙрәтенә эйә
Заметки к слайду
Слайд 5 из 39 "Воздушный поток" Русский (Россия)


рами2 - Microsoft PowerPoint
Беҙ һандуғас образында Р. Ғариповтың үҙен күргәндәй ҙә булабыҙ. Уның шиғырҙары һандуғас йырына тиң. Ул да һандуғас кеүек тормоштоң гүзәллеген данланы, ошо тормоштоң матурлығына кинәнде, ауырлыҡтар менән дәртләнеп көрәште. Шағир һандуғас һайрауы өсөн илһамды ҡайҙан ала тигән һорауға яуап эҙләһә, беҙ Р. Ғариповтың ошондай шиғырҙар тыуҙырыу көҙрәте ҡайҙан килә, таланты ҡайҙан һут ала тигән уйҙар менән ҡат-ҡат әҫәрҙәренә мөрәжәғәт итәбеҙ.
Заметки к слайду
Слайд 8 из 39 "Воздушный поток" Русский (Россия)

### 1. *“Түгелдер был, ахыры, һабантурғай,*
### *Был йөрәгем, ахыры, шулай йырлай”.*
### Р. Ғариповтың тәбиғәт күрке-ҡоштар хаҡындағы шиғырҙары

Әлбиттә, күп кенә шиғырҙарында нескә күңелле шағир ҡоштарҙың гүзәл йырлауына таң ҡала. “Ҡантүш турғайҙар” шиғырында автор ҡышҡы һыуыҡ көндәргә ҡыҙылтүштәрҙең ҡайтыуын тасуирлаған. Була бит шундай саҡ: тәбиғәттең матурлығын күрәһең, ә уны һүрәтләргә һүҙҙәр табылмай. Р. Ғарипов әйтерһең, шиғыры менән картина яҙа: саған ҡоштар ултырыуынан алмағасҡа оҡшай, “алмалар” тупылдашып ҡарға төшә, ошо матурлыҡты ҡарап тороусы лирик герой... Авторҙың һүҙ-буяуҙары сағыу һәм төрлө. Был мәлдең матурлығын тойорға сағыштырыуҙар (“ялҡынынан яҙҙар башланғандай”, “ҡарҙар ҡайнап боҙҙар бешкәндәй”), метафора һәм ҡабатлауҙар (“алмалары алһыу алмалары”, “Ҡантүшкәйҙәр егеп яҙ килә”). I зат исеменән һүҙ алып барылыуы ( “хайран итеп торам”, “үрелгәйнем өҙөп алайым тип”) булышлыҡ итә. Ошо мәлде татып кисергә, күргe килеү тойғоларын арттыра. Шағир беҙҙе донъяға шағирҙарса ҡарарға мәжбүр итә:

Алмалары, алһыу алмалары
Тупылдашып ҡарға төшкәндә,
Ялҡынынан яҙҙар башланғандай,
Ҡарҙар ҡайнап, боҙҙар бешкәндәй...

“ һабантурғай” шиғыры ла ошондай уҡ күтәренке кәйеф, хистәр, нурлы тойғолар уята. Лирик герой һабантурғай һайрауын һоҡланып күҙәтә:

Эй, һайрай ҙа һуң һабантурғай,
Ҡарҙар бөткәнен дә көтөп тормай...
һабансылар күңелен нурлай-нурлай,
һай, йырлай ҙа һуң был һабантурғай!

Ул яҙғы йырсыны “күккә менеүсе уҡҡа”, “йомолоп ергә төшөүсе тупҡа” сағыштыра. “һабантурғай, һабантурғай” исемле икенсе шиғырында автор үҙен хатта шул ҡошҡа оҡшата:

Яҙмышына ошот ҡоштоң
Оҡшашмы әллә булмышым?

Тәбиғәтте яратҡан кешегә хас күҙәтеүсәнлек, тойғолар сафлығы һәм шағирлыҡ таланты. Бына ошо әйтелгәндәр хас Р. Ғариповтың алда әйтелеп үткән шиғырҙарында. Улар уҡыусыны тойғоландыра, был мәлде күҙ алдына баҫтырыу, йөрәкте елкенләндереү ҡөҙрәтенә эйә.

Ә бына “Һандуғас таңы” шиғыры – шағирҙың һандуғас менән һоkланыу йыры. Р.Ғарипов өсөн тәбиғәт ул үҙе оло сәнғәт. Шиғырҙы уkыған һайын шағирҙың был сәнғәтте нисек аңлаған, тойған, kәҙерләгән икәнен аңлайһың. Ысын моң нисек күңелдең нескә kылдарын сиртә, шиғыр ҙа ана шундай көскә эйә. Шағир һандуғас һайрауы өсөн илһамды kайҙан ала тигән һорауға яуап эҙләһә, беҙ Р. Ғариповтың ошондай шиғырҙар тыуҙырыу kөҙрәте kайҙан килә, таланты kайҙан һут ала тигән уйҙар менән kат-kат әҫәргә мөрәжәгәт итәбеҙ.

Герой һандуғас менән бергә гүзәл тәбиғәткә лә, йырҙар ижад иткән композиторҙарға ла һоkланыуын , халыk йырҙары менән ғорурланыуын белдерә. Ул Моцарт, Паганини һәм Чайковскийҙарҙы һандуғас менән йәки, киреһенсә, һандуғасты улар менән сағыштыра.

Әллә мең-мең йылдар буйы,
Моң алдыңмы беҙҙең йырҙарҙан?
Моң алдыңмы Заһир kурайынан?
Мәғәфүрҙе тыңлап торҙоңмы?

тигән юлдарында автор башkорт халыk ижадын, йыр сәнғәтен күҙ уңында тота. Ошо һорау аша һиҙҙермәй генә ғорурлана ла төҫлө. Шағир тасуирлаған мәлдәр – kошто илһамландырған тәбиғәттәге һәм кеше тормошондағы иң гүзәл илаһи мәлдәр.

Шиғырҙың һуңғы юлдарында автор бөтә алда биргән һорауҙарына яуап биргән кеүек:

Әҙәм минән фәһем алһын, тиеп,
Һайрайһындыр инде, күрәһең...

Был гүзәл күренеш шағирҙы етди һорау kуйырға мәжбүр итә:

Ергә үлем әҙерләгән заттың
Юk микән ни әллә kолағы
Ҡалай ошо һандуғаслы ерҙе
Көл итмәксе була һуң тағы?!

Беҙ һандуғас образында Р. Ғариповтың үҙен күргәндәй ҙә булабыҙ. Шулай уk әҙиптәр ҙә. Билдәле яҙыусы Рамазан Шәғәлиев Р.Ғариповkа арнаған “Һандуғас” шиғырында шағирҙың әйтеп өлгөрмәгән һүҙҙәрен йыр итеп башkарыусы һандуғасты һүрәтләй:

Бында йоkлаған шағирҙың
Һүҙенә көй көйләйем.
Күңелендә киткәндәрен
Илгә йырлап һөйләйем!

Зөһрә Ҡотлогилдина ла шағирҙы һандуғасkа оkшата:

Һин дә ерҙә шулай сәсәй-сәсәй
Йырҙарынды йомарт өләштең.
Һәр ҡыяҡтың телен аңлап, тойоп,
Тәбиғәттең көйөн көйләштең.

Эйе, унының шиғырҙары һандуғас йырына тиң. Ул да һандуғас кеүек тормоштоң гүзәллеген данланы, ошо тормоштоң матурлығына кинәнде, ауырлыҡтар менән дәртләнеп көрәште. Ә һутты ул халыҡтан алған. Белеүебеҙсә, әҙип рус композиторҙары, башҡорт халыҡ ижады менән ҡыҙыҡһына, улар тураһында үҙенең көндәлегенә яҙып үтә. Башҡорт халыҡ ижадын өйрәнер өсөн Башҡортостан районадры буйлап сәйәхәткә йөрөй, төрлө материалдар туплай. Халыҡ йырҙарын яратып башҡара. Тик, үҙе яҙып ҡалдырыуынса, бик үк яҡшы килеп сыҡмай. Әммә ул йырҙарҙың тарихын белә, уларҙы яратып тыңлай. Быны беҙ замандаштары иҫтәлектәренән дә уҡып беләбеҙ.

Ҡоштар образына миҙгелдәр алышыныуын тасуирлаған шиғырҙарында ла тап булабыҙ. “Ҡантүш турғайҙар”ҙа ҡыш мәле, “Ҡарғалар ҡайтыуы” шиғырында яҙ килеүе һүрәтләнә. Шағир яҙҙың килеүен гел генә һағынып көтә. Яҙ еткәс, урман буйлап йөрөргә, китаптар уҡырға ярата. “Ҡарғалар ҡайтыуы” әҫәрендә лә Р. Ғарипов яҙҙы көтөп бүлмәһенә һүрәт алып ҡайтыуын, ошо һүрәт уға яҙ тәьҫораттары килтереүен һөйләй. Ҡарғаларҙың тиҙҙән яҙ килеүен хәбәр итеүе “мәғәнә бар ҡарға йырында ла” тигән фекергә еткерә. Сөнки ҡарғалар уға тағы ла һандуғаслы яҙҙар булыуын теләйҙәр. “Сыйырсыҡ” шиғырында тәүге сыйырсыҡтарҙың ояларына ҡайтыуын беҙ герой менән кинәнеп күҙәтәбеҙ:

Сыйырсыҡ, сыйырсыҡ!
Ояндан осоп сыҡ!
Оҡшаһа был өйөң,
Түгелһен моң-көйөң!..

Һәр миҙгел дә яҡын шағирға. Йәй көндәрендә унының һандуғас һайрауына иҫе китә. Моңһоу көҙ ҙә матур икән тәбиғәтте шағирҙарса яратҡан кешегә.

Ә шулай ҙа көҙҙә күпме йәм бар,
Һүҙ әйтмәгеҙ, зинһар, көҙөмә,
Осар ҡоштар сәфәр сыҡҡанда мин
Асылыма ҡайтам – үҙемә. (“Көҙ”)

Көҙгә бәйле шиғырҙарында автор торналарҙы йышырак телгә ала. Тыуған яҡтан айырылышыу һағышы менән үрелгән был шиғри әҫәрҙәр. Уларҙа торналар - тыуған яҡты ҡалдырып

китеүсе ҡоштар. “Торналар” шиғырында, мәҫәлән, Р. Ғарипов торналарҙың йылы яҡҡа китеү мәлен тасуирлай. Шағир уларҙы, торбаларҙың сафҡа теҙелешеп, еҙ мондарын ҡойоуына оҡшата. Аҙаҡ ошо тауыш герой күңелендә бик оҙаҡ сыңрап тора. Торналарҙың китеүе уны һағышҡа күмә:

Оҙаҡ-оҙаҡ ошо ауаз
Сыңрап тора, күктә һарлығып.
Һағышлы бер хыял донъяһында
Онотаһың ерҙең барлығын.

Ә бына “Сыңрау торна” шиғырында беҙ был ҡоштарҙың тыуған яҡтан сәләм килтереүҙәрен күрәбеҙ. Бында тыуған илен һағынған егеткә торнаның тауышы Урал сәләме булып яңғырай. Тәүге юлдарҙа торна Уралдығы хәлдәрҙе һөйләй. Шағирға Урал, торна шундай яҡын, ул был һүҙҙәргә “-ҡай”, “-ым” ялғауҙары өҫтәп Уралҡайым, торнаҡай тип атай. Былар Уралды яратыуын, хөрмәт итеүен, һағыныуын белдерәләр, хис-тойғо биҙәген арттыралар.

Р. Ғарипов ижадында тыуған яҡ, бала саҡ темаһы ҙур урын ала. Ҡоштар образы аша ул шул мәлдәрҙе һағыныуын еткерә. Мәҫәлән, “Йүрүҙән ҡаҙҙары” шиғырында Р. Ғарипов тыуған яғына, бала сағына әйләнеп ҡайта.

Субыр-субыр килеп, һыуға сумып,
Ҡанаттарын елпеп ҡуялар,
Әллә улар һыуҙы һағынғандар,
Әллә мин килгәнде тоялар?..

Герой үҙе ошо тәбиғәтте һағынған һымаҡ, улар ҙа мине көттөләрме, тип әйтергә теләй. Шиғырҙың аҙаҡҡы юлдарында ҡаҙҙар һыуһыҙ йәшәй алмаған кеүек, мин дә Тыуған илһеҙ йәшәй алмайым тигән фекер әйтә шағир. Эйе, ҡоштар тыуған илдәренә, тыуған яҡтарына бер ҡасан да хыянат итмәйҙәр. Алыҫтарға китеп ҡышлаһалар ҙа, кире һағынышып, өҙөлөп ҡайталар, тыуған яҡтарын ташламай, кешеләргә илаһи мондарын үҙ тыуған телдәрендә бүләк итәләр. Р. Ғарипов үҙе лә бит тыуған иленә, теленә бер ҡасан да хыянат итмәй. Киреһенсә, ниндәй генә ауырлыҡтар осраһа ла, нимә менән генә ҡурҡытһалар ҙа, тыуған телен данлап йырлауын дауам итә.

“Таныш күгәрсендәр” шиғырында һағынып, осоп тыуған ауылына ҡайтып килеүсе егетте мәктәбе ҡаршы ала. Ә уның тирәһендә ҡасандыр улар ултыртҡан тирәктәр бала саҡты хәтерләтә. Уға мәктәбе генә түгел, ә уның тәҙрә башындағы күгәрсендәр ҙә яҡын. Сөнки улар - бала сағы юлдаштары.

Күгәрсендәрҙең гөлдөрләүе йөрәктәрен елкендереп тағы ла һағыныуын арттырып ебәрә:

> Бала сағым һеҙҙең гөрләүҙәрҙә,
> Ни тиклем мин һеҙҙе һағындым.

Шулай итеп, шағир Р.Ғарипов ҡоштар хаҡындағы бер төркөм шиғырҙарында тәбиғәт йырсылары менән һоҡлана, миҙгелдәр алышыныуын ҡоштарға бәйләп тасуирлай, бала сағына әйләнеп ҡайта. *(“Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай...” исемле 2-се презентацияның 4-16-сы слайдтары)*






## 2. *“Кемгә сәптер усындағы сәпсек,*
## *Мин артынан Ҡыуҙым торнаның.”*
## Кешеләр характерын, тормошто тасуирлағанда ҡоштар образының роле

“Тәбиғәт тураһындағы шиғырҙарҙы пейзаж лирикаһы тип нарыҡлау традицияһы бар һәм ғәҙәттә кеше күңеленән бик алыҫ торған этюдтар шулай аталып йөрөтөлә. Р. Ғарипов шиғырҙары быңдай этюдтарҙан ҡырҡа айырыла: уларҙа кеше менән ер-һыу яҙмышы бер бөтөн. Шағир тал менән тал, кескәй ҡошсоҡ менән ҡошсоҡ булды, бәхетленең бәхетенән кинәнде, ҡайғылының ҡайғыһына көйөндө. Ул кеше күҙендәге һәм сәскә ҡарашындағы ихласлыҡҡа, матурлыҡҡа табынып йәшәне”,- тип яҙа Р.Бикбаев[1,483]. Алда әйтеүебеҙсә, шағир кешеләр хаҡында уйланыуҙарын ҡоштар образына бәйләп еткерә. Ҡайһы саҡ был уйланыуҙар якшы һығымталар яһатмай.

“ Аҡсарлаҡтар” шиғыры 3 бүлектән тора. Тәүге бүлегендә беҙ лирик герой менән аҡсарлаҡтарҙы күҙәтәбеҙ.

Аҡсарлаҡтар, аҡсарлаҡтар!..
Осаһығыҙ ҡыйылып.
Саҡ торам мин, һоҡланыуҙан
Ҡысҡырмайса тыйылып.

Шағир уларҙы тасуирлауҙа сағыштырыуҙарҙы йәлләмәй: “ Бит әҙернә – йәйә һымаҡ. Аҡбуҙ ҡанаттарығыҙ, Суҡышығыҙ – тоҫҡалған уҡ, Мәргән ҡараштарығыҙ”. 2-се бүлектә иртәнге сәйер тамаша тасуирлана. Аҡсарлаҡтар балыҡ өсөн тартҡылаша. Хәҙер уларҙы автор “меҫкен”, “төштөгөҙ ҡапыл күҙҙән” тигән һүҙҙәр менән ҡылыҡһырлай. Нимә был? Автор аҡсарлаҡтарҙың ҡарғаға әйләнеүен һүрәтләү аша ни әйтергә теләй? Р. Ғарипов шәхесен, тормошон, көндәлектәре менән таныш кешегә был күренеште аңлау бер ни тормай, беҙҙеңсә. Тәү ҡарашҡа һоҡланыу уятҡан кешеләрҙең юҡ-бар өсөн “яҫҡышыуҙары” тормошта була. Әгәр һин ғорур аҡсарлаҡтар затынан икән, был исемгә лайыҡ булып ҡал.

Р. Ғариповтың “Бөркөт”ө ҡапыл ғына рус шағиры А.С. Пушкиндың “Тотҡон” әҫәрен хәтергә төшөрөп ҡуя. Ҡасандыр бейеклектәрҙә тау-ҡаялар аша осҡан бөркөт бөгөн ситлектә “йоҡомһорап” ултыра. Уның ҡанатында – күктәр һалҡынлығы, ҡарашында тауҙар ағышы. “Кемдер бына икмәк һондо уға, Ниндәй тәм тапҡан ул икмәктән”, – тигән юлдар шиғырҙы беренсе тапҡыр уҡығанда аптырауға ла һалырға мөмкин. Нисек

инде икмәк һынлы икмәкте ашамаҫка мөмкин? Ә бына һуңғы юлдар был һорауға яуап бирә:

Оялғандыр, бәлки, үҙ затынан;
Бөркөтмө һуң бөркөт ситлектә?

Ирек, киңлек һөйөүсе бөркөткә, тауыҡтар сүпләрҙәй икмәк - сит-ят күренеш. Сөнки бөркөт затлы ҡошҡа иң тәмлеһе – иркенлек, азатлыҡ, киңлек, болоттар диңгеҙе! Эйе, ирек һөйөүсе аҫыл заттарҙы ситлеккә ултыртыу – уларҙы үлем көтөүгә дусар итеү генә ул. Ике шағирҙың әйтер һүҙе бер: бөркөт ситлек ҡошо түгел, ул – ирек ҡошо! Бына ошо яғы менән был шиғырҙар оҡшаш.

Яҙ ҡоштарының береһе – сыйырсыҡ шағирҙы күп әҫәр тыуҙырырға илһамландырған. "Сыйырсыҡтар ҡайтты яҙ артмаҡлап" шиғыры матур тәбиғәт миҙгеленең лирик геройға бөтә мәшәҡәттәрҙе оноторға мәжбүр иткәнен тасуирлай:

Тик йәшәге, тик эшләге килә,
Бар тәбиғәт шулай күрәһең.
Бер ниндәй ҙә ғәм юҡ башта,
Шау яҙ менән тулған йөрәгем!

Ғөмүмән, яҙ хаҡындағы шиғырҙарында шағир ҡоштарҙы урап үтмәй тиерлек. Ҡоштар – яҙҙың айырылғыһыҙ биҙәге.

"Оҙаҡ тыңлап торҙом сыйырсыҡты" шиғырында ла автор был яҙ ҡоштарының "төрлө телдә һайрауы" хаҡында еткерә. Сыйырсыҡтар – төрлө ҡоштарҙың телен, мәңге йәшел урман, сахра-күлдәрҙең өнөн белеүсе виртуоз бер ҡош булып һүрәтләнә. Ҡоштоң йырына һоҡланмаҫлыҡ түгел. Лирик герой эмоциаларын йәшермәй : " Әкәмәт, әй! Артист! Виртуоз бер!" Тик сыйырсыҡтың үҙ йыры, үҙ теле бармы? Автор ҡайһы бер оҫта шиғыр яҙыусыларҙың үҙ тауышы етмәүе хаҡында борсолоуын белдерә. Ә беҙ, ирекһеҙҙән, үҙ фекере булмаған йәштәштәребеҙҙе, замандаштарыбыҙҙы иҫкә төшөрәбеҙ. Р. Ғарипов көндәлектәрендә тағы бер мәғәнәле фекергә осрайбыҙ: "Күме телдәрҙе белә сыйырсыҡ! Ә һуң уның үҙ теле бармы? Бына быныһы ғәжәп бер һорау!..Быны нисек хәл итергә? Бөтә телдәрҙе белеүсе лингвист, ә үҙенең туған теле лә юҡ булып сыҡмай түгелме һуң әле был? Юҡ, сыйырсыҡ лингвист түгел, ул иң яҡшы музыкант – башҡарыусы! Кисә мин дә сыйырсыҡ кеүек үҙ тауышым булмағас, Гейне теле менән һайрап ултырҙым". Бына хикмәт нимәлә! Тимәк, беҙ шиғырҙа һүрәтләнгән сыйырсыҡ аша сит ил шағирҙарының әҫәрҙәрен

тәржемә итеүсене күрәбеҙ түгелме һуң?! Моғайын, кеше шиғырҙарын тәржемә иткәндә үҙ күңел донъянды еткереүе ауырҙыр. Шулай ҙа, беҙҙеңсә, Гейне, Пушкин кеүек шағирҙарҙың тәржемә итеү оло мәртәбә. Ә Р. Ғариповтың шиғри тәржемәләре бөгөн әҙәбиәтебеҙҙә аҫыл өлгөләр булып һанала.

“Торналарға табыныу” шиғырын Р. Ғарипов дуҫы Т. Йосоповkа бағышлаған.

Кисеү бирмәҫ йылға юk юғында,
Тик кисеүҙәр эҙләп торманым,

тип, герой үҙенең еңел юлдар булһа ла, уларҙы эҙләмәүен, ауырлыkkа kарамайынса йырып үтеүен әйтергә теләй. Торна - унын яңы уңыштары, яңы бейеклектәре, яңы асыштары.

Ә кемгә сәптер усындағы сәпсек,
Мин артынан kыуҙым торнаның,

тигән юлдар аша беҙ геройҙың яңы бейеклектәргә ынтылыуын тукtатмағанын, сәсенә сал kунһа ла, бейеклектәргә ынтылыуын кәметмәгәнен күрәбеҙ. Ул ваkытты (әллә тормошто микән) арғымаkkа тиңләп, арғымактың ялбыр ялын яурынына ятkырып, kаршылыk-елдәрҙең маңлайын һыҙырыуын көҫәй. Ысын ир-уҙамандың алтын сағы, әле йәшәйһе, әле эшләйһе генә. Күңелендә “сая малай” йәшәгән шағирға инде kырk йәш етеп бара. Ҡолаk өйрәнгән һәйбәт кенә мәkәл менән килешмәй, дуҫы Тимергә һабаk булыр һүҙҙәр әйтә шағир. Был һабаk беҙгә лә кәрәк булыр әле!

Артылһам да инде ғүмер тауын,
Ултырған юk һаман аkылға:
Дәрт-kомарым торна көҫәй һаман,
Ә сәсемә kунған аk kылған...

Шиғырҙың исеме менән эпиграфы бер-береһенә kаршы kуйылған: “Торналарға табыныу” һәм “Күктәге торнаға ышанып, kулындағы сәпсекте ысkындырма” мәkәле. Эпиграфта барына риза булып йәшә тигән фекер ята. Ә Р. Ғарипов шиғыры, киреһенсә, алға күтәрелеүенде дауам ит, һәр ваkыт нимәгәлер ынтылырға кәрәк, тигәнерәк юҫыkта яҙылған. Ысынлап та, тормошта бит нимәгәлер ынтылғанда ғына уңыштарға ирешеп була. Әммә төрлө саktар ҙа була. Торнаға ышанып, сәпсекте юғалтыуың да бар. Шулай ҙа торнаға ынтылыуҙы тукtатмаҫkа, төрлө kаршылыktарға бирешмәй маkсатkа ирешергә кәрәк.

Р. Ғарипов ғүмере буйы дуҫтары менән ғорурланып йәшәй. Уларҙы ярата һәм хөрмәт итә. Юkkамы ни ул көндәлектәрендә

лә: “Ә минең, исмаһам, Рауилдарым, Тимерҙәрем, Мөхәмməттәрем, Хәсәндәрем, тағы әллә күпме бөрөләрем бар...” ( 1968, 14 июнь). – тип яҙып ҡалдырмаған. Ысын дуҫ ҡәҙерен белгән кеше генә былай юлдарҙы яҙа алалыр ул! Шуға ла уның дуҫтарына, хөрмәт иткән кешеләрнә арналған шиғырҙары ихлас күңелдән яҙылған.

“Ҡарлуғас” шиғыры билдәле яҙыусы Б. Бикбайға бағышланған. Лирик герой үҙенең бала сағында ҡарлуғас кеүек ҡоштар осҡан хыялдар донъяһында йәшәүен йәшермәй. (Ирекһеҙҙән уйлап ҡуяһың: Р. Ғарипов ише шағирҙың бала саҡ хыялдар иле ниндәйерәк булды икән?) Уның хәтирәләрендә “Ҡарлуғас” әҫәренән алған тойғолар ҙа ныҡлы урын алған. Геройҙың күңелендә ирек ҡошо ҡарлуғас Бикбай ҡарлуғасына әүерелә. Хәтирәләр клуб сәхнәһенән һуғыш йылдарына юл тота:

Тик ул йылды ысын яу башланды,
Ысын яуға китте Шатморат...

Ҡасандыр ҡарлуғастың йырын тыңлаған, йырлаған Ҡарлуғастар – ҡатын-ҡыҙҙар үҙ һөйгәндәрен – Шатмораттарҙы һуғышҡа оҙата һәм үҙҙәре эшкә егелә. Ир-егеттәр һөйә белгән көслө рухлы Б. Бикбай героинялары бөгөн дә беҙҙең арабыҙҙа бар. Улар - әсәйҙәребеҙ, инәйҙәребеҙ, өләсәйҙәребеҙ, тимәксе автор. Йән тетрәткес ваҡиғалар бөгөнгө көндә лә онотолмай:

Ҡарлуғастың һаман йыры килә,
Сыҡһам әгәр, ҡайтып сәхрәгә.

Шағир ҡарлуғас аша онотолмаҫ образдарҙы тыуҙыра: ҡошсоҡто, драманың төп героиняһын, һуғыш ауырлығын иңенә алған ҡатын-ҡыҙҙарҙы, улар хаҡында уйланырға мәжбүр иткән Б. Бикбай ҡарлуғасын – драманы һәм уларға бәйле ҙур тарихты күҙ алдына баҫтыра. “Тормош сәхнә түгел, ә шулай ҙа бик күп тарих һыя сәхнәгә” – тигән шиғырҙағы юлдарҙы түбәндәгесә үҙгәртке килеп ҡуя: “Ә шулай ҙа бик күп тарих һыя шиғырға...” Ысын шағир әҫәрҙәрендә бәләкәй генә ҡарлуғас та оло һығымталар яһата.

“Кәкүк” шиғыры боронғо ырым-юрауҙарға ҡоролоп яҙылған. Бында шағир кәкүккә ғүмеренең күпме булыуын һорап мөрәжәғәт итә. Үҙе кәкүккә, ғүмерҙе аҙ биргәне өсөн ғәйепләй, үҙе аҙ бирһәң дә үпкәләмәм, ғүмерҙең бар шатлығын, бар ҡайғыһын татып китәм, тип тә ҡуя. Моғайын, ғүмеренең оҙағыраҡ булыуын эстән генә теләгәндер. Улай булмаһа, ҡошто һаранлыҡта ғәйепләмәҫ ине:

Кәкүк, кәкүк!

Ниңә улай
һүҙең һаран: бер, ике, өс?
Оҙағырак кыскырырға
Тапмайһыңмы берәй көс?

Эйе, кәкүк Р. Ғарипов ғүмере өсөн бик аҙ һайраған. Әммә уның бар шиғырҙарына ла оҙон ғүмер бүләк иткән. Р. Ғарипов үҙе әйткәнсә, тормоштоң әсе ҡайғыһын да, шатлыҡтарын да татыны. Үҙе кеүек үк шиғырҙары ла шундай уҡ тормош ҡаршылыҡтарына осранылар, әммә еңеп сыҡтылар. Ә бына замандашы Венер Йәнбәков кәкүкте шағирға ғүмерҙе аҙ юрап яңылышыуында ғәйепләй:

Саҡырмасы, кәкүк, әй саҡырма,
Ҡалын урмандарҙа тилмереп.
Һин ғәйепле ғүмер аҙ юраның,
Йырлаһа ла шағир тиң күреп...

Венер Йәнбәков шағир менән кәкүктең яҙмышы оҡшаш булыуы, икеһенең дә был донъяла йәм биреүсе йырсы булыуҙары хаҡында әйтә.

Р.Ғарипов үҙе “Кәкүк”те йыр тип атай һәм ул аҙаҡ Роза Сәхәүетдинова музыкаһы менән ысынлап та халыҡ бик яратып тыңлай торған йырға әйләнеп китә. Жанры шулай аталһа ла, был әҫәрҙә күпме фәлсәфә, Р. Ғарипов лирикаһына хас донъяны нескә тойоу, Пушкин әйтмешләй, “якты һағыш”. Уның иң үҙенсәлекле тағы бер яғы – әҫәрҙәренең ябайлығы, шағирҙың донъялағы иң ябай нәмәләрҙең, иң ғәҙәти хәлдәрҙең дә матурлығын күрә, шиғрилеген таба белеүе.

“Тутыйғош”, “Ҡыйыу сәпсек” шиғырҙарында шағир кешеләге көнсөллөк, һүҙ йөрөтөү кеүек кире сифаттарҙы ҡаты тәнҡитләй.

Шиғырҙарҙан күреүебеҙсә, Р.Ғарипов тормош, кешеләр, улар араһындағы мөнәсәбәт хаҡында йыш уйланған. Тәбиғәтте, ҡоштарҙы күҙәтеү уға ҡыҙыҡлы дөйөмләштереүҙәр яһарға мөмкинлек биргән. (“Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай...” исемле 2-се презентацияның 16-28-се слайдтары)


рами2 - Microsoft PowerPoint
“Тәбиғәт тураһындағы шиғырҙарҙы пейзаж лирикаһы тип нарыҡлау традицияһы бар һәм ғәҙәттә кеше күңеленән бик алыҫ торған этюдтар шулай аталып йөрөтөлә. Р. Ғарипов шиғырҙары бындай этюдтарҙан ҡырҡа айырыла: уларҙа кеше менән ер-һыу яҙмышы бер бөтөн. Шағир тал менән тал, кескәй ҡошсоҡ менән ҡошсоҡ булды, бәхетләнеп бәхетенән кинәнде, ҡайғылының ҡайғыһына көйөндө. Ул кеше күҙендәге һәм сәскә ҡарашындағы ихласлыҡҡа, матурлыҡҡа табынып йәшәне”
Р. Бикбаев
Заметки к слайду
Слайд 17 из 39


рами2 - Microsoft PowerPoint
Р.Ғариповтың “Бөркөт”ө рус шағиры
А.С. Пушкиндың “ТотҠон” әҫәре менән ауазлаш.
Ҡанатында – күктәр
һалҡынлығы,
Ҡарашында – тауҙар һағышы.
Туңып ҡалған уның күҙҙәрендә
Болоттар һәм йылдар ағышы.
Кемдер быны икмәк һоңлю уға,
Нинләй тәм тапҡан ул икмәктән?
Оялғанмы, балки, үҙ затынан:
Беркетме һун беркет ситлектә?
Ултырам ситлектә, ҡаҡмай керпек тә,
Ирекһеҙ иптәшем – бер йәш бөркөк тә,
Ян теҙрәм төбөндә, ҡарғап доньяһын,
Ҡағына һәм суҡый ҡанлы ҡалъяһын
Суҡый ҙа ырғыта, текләй тәҙрәгә,
Әйтерһең, бер уйҙы уйлай ул бергә.
Ҡарашы, тауышы ниҙер әйткәндәй,
"Әйҙәсе, осоҡ!" тип әйтер киткәндә.
Заметки к слайду
Слайд 19 из 39

### *3. “Был донъяла аkkош kошо барҙа...”*
### Шағирҙың мөхәббәт хаkындағы шиғырҙарында kоштарҙың сағылышы

Р. Ғариповтың мөхәббәт хаkындағы шиғырҙары бихисап. “Мөхәббәттең бөйөклөгөн, күңелдәрҙе арбаусан моңон, күҙҙең яуын алыр төҫтәрен уkыусыларға Р.Ғарипов кеүек еткерә алған шағирҙар башkорт шиғриәтендә бик һирәк”, - тип билдәләй Р.Бикбаев[1,480]. Унын яратыу хистәре бер төрлө түгел: ул йә һөйөүенә шатлана, күктәргә менә, йә ошо тойғо ғазаптары арkаһында үҙенә урын тапмай моңлана, тынғыһыҙлана.

Был шиғырҙарында автор күберәк һандуғас, аkkош, kайһы саk kайын ағасында моңланыусы кәкүк образдарына мөрәжәгәт итә. “Яңғыҙ аkkош” шиғырында ғүмер дуҫын юғалтkан аkkош тасуирлана:

Моңая аkkош, моңая,
Моңая яңғыҙ kалғас –
Ғүмер дуҫы, һәләк булып,
Kара kайғыға һалғас...

“Аkkош шундай kош икән ул: башkаларҙы иш итмәй”,- тигән фекерҙе еткермәксе лә автор, тик һуңғы “kанаты kырkылған аkkош” хаkындағы юлдары ғына икенсе төрлө уйҙарҙы уйлатып kуя. Kайһы саk ғорур һөйөүен йәбергә бирмәҫ өсөн һауаларҙан ташланырға һындырылған kанаттар ирек бирмәй икән... Р. Ғариповтың мөхәббәт хаkында моңһоу шиғырҙарының береһелер был “Яңғыҙ аkkош” исемле әҫәре.

Ә бит нәk ошо “аkkош йыры” әллә ниндәй киңлектәргә саkыра түгелме һуң?

Йөрәк әгәр ярһыу толпар булһа,
Ауыҙлыkта алтын аkыл бар.
Ә елергә инде ирек kуйғас,
Ары торһон алтын аkылдар.

“Аkkош йыры”

Шағир хатта “аkылдарҙы ауыҙлыkлаған көмөш йүгәндәрҙе лә, ебәк теҙгендәрҙе лә асып ташларға” әҙер. Сөнки көҙҙәрҙе яҙ итеүсе “аkkош йыры” – мөхәббәт бар бит донъяла.

“Һандуғасым һайрап туkтарһың да...” шиғырында һандуғас мөхәббәт символы булып күҙ алдына баҫа. Шағир һандуғас һайрауының мәңгелек булыуын теләй. Сөнки:

Ниндәй генә мондар, тауыштар юk,
Тик һандуғас, һинең тауышың –

Минен өсөн алыҫ йәшлегемдең
Мөхәббәте менән ҡауышыу...

Был шиғырҙы уҡый башлаһаң, тыуған яҡтың матурлығын ошо ҡошта күрә тип уйлайһың. Ә ысынында “һандуғас” — ул шағирҙың мөхәббәт ҡошо. Р. Ғарипов, көндәлектәренән күреүебеҙсә, гел генә беренсе мөхәббәтен иҫкә ала. Моғайын, һандуғас йыры ла ошо беренсе мөхәббәтен хәтерләткәндер уға. Шиғырҙарҙы тикшереүебеҙ шуны күрһәтә: автор күпселек әҫәрҙәрендә иң тос фекерен аҙаҡҡа “йәшерә”. Быны хаҡта ул көндәлектәрендә яҙа: “Бер ҡасан да үҙендең әҫәрендә әйтә торған фекерҙе үҙең алдан уҡ әйтеп торма, ә уҡыусы уны уҡып сыҡҡандан һуң ғына үҙе фекерләп ҡуйһын. Укыусы геройҙар менән йәшәһен, кисерһен, улар менән бергә эшләһен, һөйһөн, үҙе бер тормошта үтһен, ғазапланһын”( 1953, 24 апрель).

Һөйөү хистәре шағир күңелендә берсә ут уйната, берсә иремәҫтәй кеүек боҙҙар ҡалдыра. “Аҡ сәпсек” шиғырындағыса “боҙ ярырҙай аҡ сәпсеккәй осоп килер, унан аҡ күперкәй ярҙан ҡуҙғалыр”. Герой күңеле нескә тойғоларға бай. Хатта кеше күңелен иретергә, йылы һүҙ, йылы ҡараш та етә. Шиғыр саф тойғолар уята: “аҡ” һүҙҙәре ҡабатланыуы, ҡошто “сәпсеккәй” тип яратып атауы, халыҡ йырҙарындағыса ҡабатлауға бәйле стилистик фигуралар булыуы уҡыусы күңеленең дә нескә ҡылдарын сиртә:

Аҡ сәпсеккәй осоп килде лә шул,
Аҡ ҡойроғо менән боҙ ярыр;
Аҡ ҡойроғо менән боҙ ярыр ҙа, -
Аҡ күперкәй ярҙан ҡуҙғалыр.

“Тулҡынлана, шаулай аҡ ҡайын” шиғырында яңғыҙ кәкүкте һүрәтләү менән үҙенең һөйөүен белдерә. Һөйгәнен беҙ ҡайын образында күрәбеҙ, ә егет — кәкүк. Кәкүк үҙенең яртыһын саҡыра, тик уны бер кем ишетмәй:

Тик мин генә кәкүк моңон тыңлап
Моңһоуланам кәкүк айында.
Һин шул ҡайын булһаң, кәкүк булып
Ҡалыр инем ошо ҡайында.

Р.Ғарипов шәхесенең ҡабатланмаҫ үҙенсәлектәре уның мөхәббәт лирикаһында сағыу кәүҙәләнеш таба. Ҡоштар, ағастар, сәскәләр - былар бөтәһе лә йә ғашиҡ, йә күңеле яралы геройҙың тойғоларын еткерергә ярҙам итәләр. “Р. Ғарипов нескә тойғоло, фәлсәфи мәғәнәле лирик шағир ине, - тип яҙа Р. Бикбаев. - Ихласлыҡ уның лирикаһының төп үҙенсәлектәренән

булды. Шуға ла әҫәрҙәре йөрәк серҙәрең менән йәшермәйенсә бүлешкән шиғри көндәлекте хәтерләтә”[1,481]. Авторҙың “күңел көндәлеге”ндә үҙенден тойғоларынды уҡығандай булаһың. Ошолар бөтәһе лә шағирҙың мөхәббәт хаҡындағы шиғырҙарын оҙон ғүмерле яһайҙар. Сөнки ысын күңелдән һөйә белгән кешеләр генә ошо хистәрҙе кисерә, ә ундай беҙҙең арала күп. (“Эй, һайрай ҙа һуң был һабантурғай...” исемле 2-се презентацияның 29-36-сы слайдтары)






## Йомғаҡлау

Шағир Р.Ғариповтың ҡоштар хаҡындағы шиғырҙары ҡыҙыҡлы, художестволы үҙенсәлектәргә бай, тәрән йөкмәткеле. Был әҫәрҙәр әҙип ижадында ғына түгел, ә тотош башҡорт әҙәбиәтендә әһәмиәтле урын тоталар. Быны күп кенә тәнҡитселәр ҙә билдәләп үтәләр. Ф.Күзбәков, мәҫәлән, былай ти: “Тирә йүндәге ҡәҙимге күренештәр, таныш йән эйәләре, хатта әҙәбиәт өлкәһендә художестволы деталь, образ кимәленә күтәрелгәндәре лә Рәми Ғарипов ижадында Рәмисә балҡыны, быҒаса билдәле булмаған ҡырҙары менән асылды, тотоп ҡарарға мөмкин булғандай тәьҫир ҡалдырҙы. Шулар рәтенә мин шағирҙың баҙрап торған ут-ҡыҙыл миләшен, киң болондо бер итеп сапҡан өркәк ҡолонсағын һәм, әлбиттә, “ҡарҙар бөткәнен дә көтөп тормай” йырлаусы һабантурғайын индерәм. Уларға шағир ҡат-ҡат мөрәжәғәт итә һәм һәр осраҡта ла яңынан-яңы һыҙаттар — биҙәктәр өҫтәй, иҫ китмәле итеп семәрләп ҡуя”[18, 280]. Ижадҡа әйҙәүсе илһамды ла шағир “илһам ҡошо” тип атай. Илһам ҡошо шиғриәт илендә азат. Бөтәһе лә үҙ иркендә, нисек теләй, шулай оса. Шиғырҙар хатта шағир теләгәнсә түгел, ә илһам ҡушҡанса тыуа. Ана шул илһам бойорғанса ғына яҙылғандар уҡымлы, күңелгә ятышлы була. Сөнки унда шағирҙың ысын уй-кисерештәре, хистәре сағыла, уҡыусының йөрәгенә үтеп инә. Беҙҙеңсә, Р. Ғариповтың шиғырҙары нәҡ ана шундайҙарҙан: улар йөрәккә үтеп инә һәм уйланырға, фекер йөрөтөргә мәжбүр итә. Р. Ғарипов тормошо менән быны иҫбатлай. Мәҫәлән, Н.Ғәйетбаевтың “Төн” пьесаһында Р. Ғариповҡа партияны маҡтап яҙырға ҡушалар. Әммә уларҙы маҡтап бер шиғыр ҙа яҙылмай. Р. Ғариповтың шиғриәте азат, уның илһам ҡошо бер ниндәй ҙә хаҡимлыҡты ҡабул итмәй. Ул үҙенең күңеле, йөрәге, намыҫы ҡушҡанды яҙа. Һәм Туған ер, тел, хеҙмәт, мөхәббәт хаҡында башҡорт шиғриәте гәүһәрҙәре булырлыҡ шиғырҙар тыуҙыра.

Алдан әйтеүебеҙсә, Р.Ғариповтың ҡоштар хаҡындағы шиғырҙарының идея-йөкмәткеһе төрлө. Ул дуҫлыҡ, мөхәббәткә бәйле тойғоларҙы, ғорурлыҡ, намыҫ кеүек төшөнсәләрҙе тап ошо төркөмдәге әҫәрҙәргә бәйләп еткерә. Бөгөнгө көндә күп кенә шағирҙар, замандаштары Р.Ғариповтың үҙен шул ҡоштарға оҡшата. Мәҫәлән, Рәсих Ханнанов өсөн шағир - башҡорт шиғриәте күгендә елпеп һайраған моңло һабантурғай:

Һайраны бер ҡошсоҡ баксала,

Ашkынып, елпенеп, елкенеп.
hайраны ул әллә шатлыkтан,
Әллә ҙур kайғылар кисереп.
Мондарҙы түкте лә мул итеп,
Кинәттән йығылып йән бирҙе.
Оkшаттым мин ошо kошсоkkа
Ерҙән йәш киткән дуҫ шағирға.

Шағирҙың был төркөм шиғырҙарын тикшереү мәлендә беҙ ҙә унын үҙен бөркөт кеүек ғорур шәхес, hабантурғай кеүек тормошто данлаусы, hандуғас кеүек мөхәббәт йырын йырлаусы нескә күңелле шағир итеп күҙ алдына баҫтырҙыk. Иманыбыҙ камил, беҙҙең йәштәштәр ҙә, киләсәк быуындар ҙа был әҫәрҙәрҙе уkып илhам алыр, рухи кинәнес кисерер, донъяла йәшәүенә kыуаныр.

## Әҙәбиәт


1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 6-сы том. Хәҙерге әҙәбиәт. – Өфө: Китап. -1996. – 710 б.
2. Бикбаев Р. Шағир донъяһы (Р.Ғарипов ижадына бер байҡау). //Ағиҙел. – 1995.- №6. – 122-се б.
3. Бикбаев Р. Рәми. Шағир тураһында китап. – Өфө:Китап.- 2007-616 б.
4. Бикбаев Р. Шағир һүҙе-шағир намыҫы. – Өфө: Китап. – 1997. – 112 б.
5. Бикбаев. Р. Рами. Книга о поэте. // Ватандаш. -2009. – № 1. – С. 68.
6. Бикбаев. Р. Рами. Книга о поэте. // Ватандаш. -2009. - № 5. – С. 103.
7. Бикбаев. Р. Рами. Книга о поэте. // Ватандаш. -2009. - № 11. – С. 55.
8. Бикбаев. Р. Рами. Книга о поэте. // Ватандаш. -2009. - № 12. – С. 72.
9. Ғарипов Р. Минен анталогиям. Тәржемәләр. Төҙөүсеһе Н.В.Ғарипова. - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 224 б.
10. Ғарипов Р. Алырымҡош менән Бирмәмҡош. Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө : Башҡортостан китап нәшриәте, 1992. – 368 б.
11. Ғарипов Р. Йондоҙло уйҙар. - Өфө: Китап. – 1979. – 240 б.
12. Ғарипов Р. Әҫәрҙәр ( өс томда). 2-се том. Көндәлектәр, хаттар, мәҡәләләр. –Өфө: Китап. – 1998. – 592 б.
13. Ғәбитов И. Р.Ғарипов әҫәрҙәренән һәм көндәлектәренән өҙөктәр менән кроссворд .// Башҡортостан уҡытыусыһы. - 2007. -№2. – 96б.
14. Монасипов С. Шағирҙың мәктәп йылдары. // Башҡортостан. -1991. - №13. - 13б.
15. Мөхәмәтйәнова Г. Р.Ғариповтың «Дон-Кихот» шиғырында көрәш мотивы .// Башҡортостан уҡытыусыһы. - 1991.-№11. - 38б.
16. Садикова С. Бар булмышы халҡы рухы һымаҡ. // Башҡортостан уҡытыусыһы. - 1999.-№2. – 31б.

**17.** Солтангәрәев Р. Яҙмыш. Очерктар. – Өфө: Башkортостан китап нәшриәте, 1991. – 288 б.

**18.** Халыk шағиры Рәми. Иҫтәлектәр, арнауҙар. – Өфө: Китап.- 2007. – 560 б.

**19.** Хәкимов Ә. Күҙҙәремдә халkым күҙе бар. // Башkортостан. 1992.-№ 29. - 3б.

**20.** Шаймырҙина Д. Мин kайттым бит. // Башkортостан уkытыусыһы. 2007.- № 1. - 10б.

**өә.** Шафиков Г. Крючья под ребро.- Уфа: Китап, 1993. – С. 480.

**22.** Шафиков Г. Певец земли, поэт народа. / Истоки. – 1992. - №3. – С.2

**23.** Әршәпов Ә. Ҡәҙерле Рәми дуҫым... // Башkортостан. – 1992. - №4. – 2б.

**24.** Юлдашбаев А. Рәми Ғарипов эстетикаһының kайһы бер аспекттары. // Башkортостан уkытыусыһы. – 2005. - №4. – 31б.

**25.** Ямалетдинов М. “Замандаш” – Рәми Ғариповkа. // Замандаш. – 1991. - №5. – 5б.